“Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы муниципаль район
Яңы Мораптал ауылы Баязит Бикбай исемендәге урта дөйөм белем биреү мәктәбе”

# ЙЫР БУЛЫП ҠАЙТТЫ

Башҡарҙы 10-сы класс

уҡыусыһы Ғәлиева Илюзә

Етәксеһе Сынбулатова Ғ.Н.

2020 йыл

# Йыр булып ҡайтты...

**Йөкмәтке**

**1.Инеш**
**2.Бала сағы**(1985-1908)
**3. Тыуып-үҫкән ерҙән айырылыу, үҫеү (1908-1922)**
**4. Әлмөхәмәтов-яугир**
**5.Белем алыу**
**6. Ҡазан**
**7. Өфөгә ҡайтыу**
**8. Үкенесле үлем**
**9. Йыр булып ҡайтты**
**10.Әҙәбиәт**

**Маҡсат**

1. Композитор, йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тормош юлын өйрәнеү.

2 Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге музей материалдарын өйрәнеү.

3. Әҙәбиәт менән танышыу.

**1. Инеш**

Быуаттар буйы үҙ ере, теле, иле, азатлығы өсөн көрәшеп бөгөнгө көнгә тиклем беҙгә һаҡлап алып ҡалынған илебеҙ Башҡортостан быйыл 100 йыллығын байрам итә. Үткәндәребеҙ менән ғорурланырға, тарихыбыҙҙы белергә, хөрмәт итергә тейешбеҙ.Илебеҙҙең үткән шанлы-данлы йылдарын һәм юлдарын, Кинйә Арыҫланов, Баязит Бикбай кеүек данлыҡлы шәхестәрен онотторға хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең.

Башҡортостанда 100 йыллыҡҡа күренекле 100 шәхестең исемен билдәләнеләр. Шул исемлектә минең яҡташым Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов та бар. Ошо эшемде данлыҡлы яҡташыма арнайым.

Башҡорт халҡы борон-борондан үҙенең ауыр яҙмышын оҙон көйгә һалып йырлаған, шатлығын күңелле йырҙар, таҡмаҡтар аша күрһәткән. Һәр башҡорттоң күңелендә моң йөрөгән. Шулай ҙа араларында матур, сағыу

тауышы менән айырылып торған йырсылыр ҙа булған. Шундай йырсы, композитор, башҡорт операһына нигеҙ һалыусы яҡташыбыҙ - Ғәзиз Әлмөхәмәтов.

**2.Бала сағы**

Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтовтың тыуған ерен РФ һәм РБ Журналистар союзы ағзаһы Эльфрида Талипованың "Ер биҙәге" исемле китабында бирелгән архив материалдары тап Иҫке Мораптал ауылында тыуғанлығын иҫбатлай: "Ревизские сказки 1859 год 16 марта Оренбургской губернии и уезда 1-го Башкирского кантона юрта №3 деревни Старое Мурапталово о башкирцах состоящихся мужского и женского пола душах. Фонд И-138. Опись №704. 102 ревизия" тип аталған исемлектә 43-сө булып 34 йәшлек Яҡуп Әлмөхәмәтов яҙылған". 3-38 Ә Яҡуп (1824 йылғы) Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың атаһы-Мөхәмәтсәлихтең олатаһа Яхияның бер туған ҡустыһы.

Тимәк,Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 20 октябрендә Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы Иҫке Мораптал ауылында донъяға килә. Ғаиләлә алты малай үҫә: Абдулла, Абдрахман, Ғәзиз, Фәтих, Ғәлирахман, Хәйбрахман. Бик күп йылдар үткәс ошо туғандарына бик ҙур ярҙамы тейә йырсының.Ә бына ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипованың иҫтәлеге: «Атайым һәйбәт холоҡло, туған йәнле, кешелекле кеше ине... Туғандарына ғүмере буйына ярҙам итте. Абдулла ағайға ай һайын аҡса ебәреп торҙо, ул сирле генә кеше ине. Хәйбрахманды 1922 йылда үҙе менән алып китә, ул беҙҙең ғаиләлә үҫте. Абдрахман ағайҙың ете балаһы булды, Рауза исемле ҡыҙы беҙҙә ҙурайҙы, хәҙер Ташкентта йәшәй. Ул минән өс йәшкә олораҡ ине, беҙгә кейемде лә бер иштән тегеп кейҙерәләр, игеҙәктәр кеүек йөрөнөк. Ғәли ағайҙы ла уҡытты атайым. Фәтих ағайҙы, сирләгәс, шифаханаға ебәрҙе. Шулай итеп, барлыҡ туғандары хаҡында ла хәстәрлек күрә ине. Өләсәйҙе ихтирам итте, беҙгә килһә, матур итеп кейендерер ине». Ғәзиздең әсәһе -Ғәлимә бик моңло тауышлы, белемле, зирәк кеше булған. Башҡорт халыҡ йырҙарын яратып йырлаған. Үҙенең белгәндәрен балаларына ла өйрәткән. Бәләкәй Ғәзиз ҡаршыла торған Яҡут тауына менергә яратҡан.

Тауҙа Ғәзиз йырлаһа, бөтә Мораптал тыңлар ине, тип һөйләгән һүҙ бөгөнгә көнгә тиклем килеп еткән.
-Әсәм йырлап бишектә бәүеткән, йырлай-йырай тәү тапҡыр атлап киткәнмен. Күп балалы, ярлы башҡорт ғаиләһенең иң ҙур шатлығы ла йыр булған. Башҡорт халыҡ йырҙары аша халыҡтың ауыр яҙмышын, ҡанлы тарихын, Салауат кеүек батырҙарын белдек, тип һөйләгән йырсы үҙенең бала сағын иҫләгәндә.

**3. Тыуып-үҫкән ерҙән айырылыу, үҫеү**

Атай йортонан бик иртә сығып китергә тура килә. 1908 йылда,үзбәк байында иҫәпсе булып эшләп йөрөгән ағаһы Абдрахман, Ташкентка Ғәзизде лә алып китергә була. Әсә кешегә нисек кенә ауыр булмаһын, ризалығын бирмәйенсә сара ҡалмай — ғаиләләге алты баланың тамағын туйҙырыу бик ҡыйын була. Шулай итеп, Ғәзиз ун дүрт кенә йәшлек үҫмер сағынан үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫа. Ғәзиз йәйҙәрен ағаһы менән ялланып йөҙөм баҡсаларында эшләй, ҡышҡы осорҙа мәҙрәсәлә уҡый. Ташкентка барып йәшәй башлаған тәүге йылда уҡ ул йәштәр, йыр һөйөүсе яҡташтары араһында башҡорт йырҙарын бик моңло итеп башҡарыуы менән ныҡлы танылып өлгөрә.
Был хаҡта Троицкиҙа сыҡҡан «Аҡмулла» журналының хәбәрсеһе М. Бөдәйле бик ҡыҙыҡлы хәтирәләр яҙып ҡалдыра. Ташкенттың бай бер сауҙагәре үҙенең баҡсаһында бер мәлде байрам ойоштора. Бына шунда ҡунаҡтарға самауыр ҡуйып, байға хеҙмәт итеп йөрөгән ун дүрт йәшлек ҡаҡса ғына башҡорт малайының үҙ алдына «Ҡуңыр буға» көйөнә йырлауын ишетеп, ғәжәпкә ҡала. «Ҡунаҡтар дастарханға йыйылғас, мин Ғәзиздең йырлауын тыңларға тәҡдим иттем, – ти М. Бөдәйле. — Ул беҙгә үҙенең халҡының йырҙары «Ҡолой кантон»ды, «Һаҡмар»ҙы, «Шәүрә»не йырлап күрһәтте. Уның һандуғас тауышындай моңло йыры һәр кемдең күңел түренә үтеп инде»(1). 1914 йылдан иһә 19 йәшлек йырсы егет үҙ аллы концерт эшмәкәрлеген башлай. “18-19 йәшлек йырсы егеттең исеме тиҙҙән Урта Азияла ғына түгел, ә Себер, Ҡаҙағстан, Волга буйы республикаларында ла киң тарала, уны бер

туктауһыҙ концерттарға саҡыралар, һәм ҡайҙа ғына булмаһын, ул сығышын "Буранбай"ҙан башлар булған."(5)Бына ошо көслө, сағыу һәм тетрәндергес милли моң менән яңғыраған был илаһи тауыш артабан меңәрләгән кешеләрҙең күңелен яулай — Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың йыраусылыҡ сәнғәте ыҫын-ысынында оҙон көйлө башҡорт йырҙарын башҡарыуҙың эталонына әйләнә.1922 йылда Ташкент ҡалаһында беренсе "Сания" операһын сәхнәгә сығара.

**4. Әлмөхәмәтов-яугир**

1917 йылда Башҡортостанда милли автономия яулауҙы маҡсат итеп ҡуйған милли-азатлыҡ хәрәкәте ойошторола. Был ваҡытта Ғәзиз Әлмөхәмәтов Ташкенттан бөтөнләйгә күсеп ҡайтмаған, шулай ҙа Ырымбурҙа концерттар ҡуйып йөрөгән. Башҡортостан Ваҡытлы Революцион Советы үҙ составына Ғәзиз Әлмөхәмәтовты индерә. "Әммә ул, сәйәси эшкә әҙерлеге етмәүгә һәм дәүерҙең ҡатмарлы хәлдәрен аңлап етмәүгә һылтанып, Совет составынан сығарыуҙы һорай, БВРС унын үтенесен ҡәнәғәтләндерә һәм, йырсыға стипендия тәғәйенләп, Ырымбур музыка училищеһына уҡырға йүнәлтмә бирә",-тип яҙа Рәшит Шәкүр. Шулай ҙа Ғәзиз Әлмөхәмәтов Ырымбурҙан Баймаҡҡа килә, доклад уҡый, башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡотҡарыу эше менән янып йөрөй. Азат Юландың яҙыуы буйынса, күп кенә милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре кеүек үк, унын да йәшеренеп йөрөүе ихтимал.

1918 йылда Башҡорт Хөкүмәте урындарҙа большевиктарға ҡаршы көрәш алып барыу маҡсатында Башҡортостан кантондарында ирекле ғәскәр ойоштора башлай. Һәр кантондан ике-өс йөҙ кешелек отрядтар ойоштороу ҡарала. Ҡыпсаҡ кантонында ирекле отряд ойоштороу бурысы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа йөкмәтелә. Уға 23 августа Хәрби шура отряды ойоштороу өсөн 5650 һум аҡса һәм ҡорал бүленә.Ҡыпсаҡ кантонында 180 кешенән торған отряд ойошторола. 1918 йылдың сентябрендә Хәрби шураҒәзиз Әлмөхәмәтовты 1 августан Ҡыпсаҡ кантонының ирекле отряды етәксеһе итеп тәғәйенләү тураһында фарман сығара.

Шулай итеп, Ғәзиз Әлмөхәмәтов Башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәтенең уртаһында ҡайнап, илем, ерем, халҡым, тип янып йөрөгән шәхестәрҙең береһе булған. Милли хәрәкәт осоронда концерттар ҡуйып ҡына йөрөмәгән, ә бик тә етди һәм яуаплы эштәр башҡарған.

**5. Белем алыу**

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тамамланған музыкаль белеме тураһында архивтарҙа документтары һаҡланмаған.

Сағыу, моңло, көслө тауышлы, иркен тын алышлы йырсынан ҡайҙан өйрәндең, тигән һорауға«Мин үҙ туған халҡымдан йырларға өйрәндем», — тип яуап биргән ул»(2).

“Ул йәш сағында күп мәғлүмәт бирерлек мәктәп күрмәгән. Бергә ғүмер иткән сағыбыҙҙа мин уның белемен арттырырға тырышыуын күреп ҡыуана инем. Үҙ өҫтөндә бик күп эшләне.”- тип иҫләй ҡатыны Мәстүрә Әлмөхәмәтова 1973 йылда яҙған иҫтәлектәрендә. (4)

“1918 йылда Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы йырсыға стипендия тәғәйенләп, Ырымбур музыка училищеһына уҡырға йүнәлтмә бирә,”-тип яҙа Рәшит Шәкүр.Бынан һуң сәйәси ваҡиғаларҙың ҡырҡа бороломштары арҡаһында Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ул уҡыу йортонда, моғайын, уҡырға тура килмәгәндер.

Архив документтарында 1921 йылда Ғ.Әлмөхәмәтов Башҡортостандың халыҡ комиссариатынан Ташкент консерваторияһына йүнәлтмә бирелеүе тураһында документ һаҡлана.(6) Шулай уҡ 1922 йылда БАССР-ҙың халыҡ комиссарҙары Советы композиторҙы Германияға уҡырға ебәреү һәм уның уҡыуын финанслау тураһында ҡарар сығара. Әлмөхәмәтов Ҡазанға күскәс,әлбиттә, был ҡарар юҡҡа сыға.(6: 14)

Роза Ғәзиз ҡыҙының өй архивында ошондай йөкмәткеле документ һаҡланған. “Предъявитель сего тов. Альмухаметов Г. Действительно согласно приказа по Башнаркомпросу от 4\III-35 года за №42 § 2 командируется в Московскую государственную консерваторию для продолжения своей учебы...”.(6: 14)

Бөтөн йәне-тәне менеән ижади эшмәкәрлеккә сумған киң таныулы йырсы һәм композиторҙың йылдар буйы консерватория бүлмәләрендә ултырырлыҡ форсаты ла, түҙемлеге лә, мөмкинлеге лә етмәгәндер, моғайын.(7)

**6. Ҡазан**

"Музыкаль "белеменең наҡыҫлығын тойған Әлмөхәмәтов дуҫтарының тәҡдиме буйынса, әҫәрен эшләп бөтөү ниәте менән Ҡазанға юллана. Музыкаль театр өлкәһендә эшләгән , танылған йырсы Солтан Ғәбәши һәм тәжрибәле композитор Мәскәү консерваторияһын тамамлаған Василий Иванович Виноградовға мөрәжәғәт итә. "Татарстан республикаһы хөкүмәте уңайлы шарттар тыуҙыра, либретто яҙыу күренекле татар яҙыусыһы Фәтих Әмирханға йөкмәтелә. 1925 йылдың 25 июнендә башҡорт һәм татар сәнғәтен өр-яңы юғарылыҡҡа күтәреп, сәхнәгә тәүге башҡорт-татар операһы ҡуйыла.(5)Казанда 1928, 1929 йылдарҙа В.И. Виноградов унын башҡарыуы буйынса «Байыҡ», «Зөлхизә», «Халҡым өсөн», «Шәүрәкәй», «Ҡаһым түрә», «Сибай кантон», «Ҡолой кантон», «Таштуғай», «Арғужа» исемле башҡорт халыҡ йырҙарын һәм ноталарын баҫтырып сығара.

1922 йылда юғары белемле доктор Мәстүрә Ғилман ҡыҙы Фәйзуллина менән өйләнешәләр. 1924 йылдың 24 мартында ҡыҙҙары Роза тыуа.

**7. Өфөгә ҡайтыу.**

Советтарҙың VII Бөтөн Башҡортостан съезы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа халыҡ артисы исемен бирергә һәм унын үҙен Башҡортостанға ҡайтарырға тигән ҡарар сығара. Ошо ваҡиғанан һуң бөйөк йырсы Өфөгә күсенеп ҡайта(11). 1929—1937 йылдар Ғәзиз Әлмөхәмәтов ижадының һәм эшмәкәрлегенең өр-яңы һәм айырыуса емешле осорона әйләнә. Ул, әлбиттә, концерт эшмәкәрлеген дауам итә, алыҫ гастролдәрҙә йөрөп ҡайта. Башҡорт ауылдарында йыр-көйҙәребеҙҙе йыйыу, фольклор материалдарын туплау эше менән шөғөлләнә. Йәй һайын тыуған төйәгенә ҡайтып, туғандарын, якташтарын йыр-мондары менән һөйөндөрөп китә. Алыҫ ауылдарҙа талантлы башҡорт йәштәрен табып, уҡырға урынлаштыра.

Ниһайәт, ул илдә беренсе булып 1932 йылда Мәскәү дәүләт консерваторияһында милли студия астырыуға өлгәшә. Башҡорт студияһында уҡып сыҡҡан йырсылар, композиторҙар — Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Рәйеф Ғәбитов һ.б. — профессиональ башҡорт сәнғәтенең төп көстәренә әйләнә. Ошо быуын йырсылары яуаплы һәм абруйлы бурыс атҡара. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына нигеҙ һала.(7)

**8. Үкенесле үлем.**

1937 йылда Ғәзиз Әлмөхәмәтовты ҡулға алалар. Уны милләтселектә ғәйепләйҙәр. Ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипова : “Атайым ике тапҡыр Стәрлетамаҡта Зәки Вәлиди алдында концерт биргән булған, шуны ғәйеп итеп милләтсе мөһөрөн баҫҡандар”,- тип билдәләй Р.Шәкүр. Азат Юландың яҙыуынса, Ғәзиз Әлмөхәмәтов Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең уртаһында ҡайнап, илем, ерем, халҡым, тип янып йөрөгән шәхестәрҙең береһе булған.Ҡулға алыныуға шул да сәбәп булғандыр, ти ул.

Шағир Мөслим Маратҡа төрмәлә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың һуңғы көндәрендә бергә ултырырға тура килә. Уның иҫтәлектәрен уҡып, бөйөк йырсыбыҙҙың бөйөк рухлы шәхес булғанлығына ла инанабыҙ. «Ул рәшәткә артындағы тотҡондар — тотош ил буйынса барған енәйәт ҡорбандары алдында йырланы. Һуңғы һулышына тиклем үҙенең ғәйрәтле ҡоралын — йырын ташламаны. «Урал»ды, «Буранбай»ҙы йырлағанда, аҙағынаса тамамлап ҡуйһын өсөн, башҡа тотҡондар надзирателдәрҙе тотҡарлап, уның эргәһенә ебәрмәй торҙо».(7)

«Халыҡ мөһөрө» тағылған Әлмөхәмәтовтың афишалары, ноталары, пластинкалары яндырыла. Ләкин Морапталда йәшереп алып ҡалған пластинка тыңлауын Эльфрида апай Талипова былай тип иҫләй: “ Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың Яҡын туғаны Гөлсөм апайҙа грампластинкаһы

һаҡланғанын сер итеп әйттеләр, беҙ бер-нисә ҡыҙ барып үтенесебеҙҙе әйткәс, инәй түр яҡҡа саҡырҙы ишектән керәһен элеп ҡуйҙы, тәҙрә ҡормаларын тартты. Шунан, боронғокомод тартмаһынан сепрәк-сапраҡ араһынан грампластинка сығарып патефонға ҡуйҙы.Шымып ҡалған балалар күңеленә тағы ла шом өҫтәп, ғәйрәтле лә, моңло ла тауыш ишетелде..."(9

**9. Йыр булып ҡайтты.**

1957 йылда бөйөк йырсының исеме аҡлана.

1968 йылда милли йырлаусылыҡ сәнғәтендә әһәмиәтле ваҡиға булып үтте — йәш таланттарҙы асыу маҡсатында Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге призға йырсылар конкурсының беренсе бәйгеһе уҙғарылды.
1995 йылдың көҙөндә мәшһүр башҡорт йырсыһы Ғ.С. Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 100 йыл тулыу көндәрен республикабыҙ хөкүмәте һәм халкыбыҙ тантаналы рәүештә билдәләне.

2001 йылдың 31 майында республика музыка интернатына Ғәзиз Әлмөхәмәтов исеме бирелә.

Яңы Мораптал ауылында Ғәзиз Әлмөхәмәтов музейы эшләй.

Тыуған ауылы Иҫке Морапталда йырсы исемен йөрөткән урам бар.

Мораптал ауылы культура йортонда йырсыны һынландырған Барельеф тора.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов нигеҙ таштарын һалышкан милли опера һәм балет театрыбыҙ бар.

Иң мөһиме уның исеме үҙе үк моңло йыр, яҡты йондоҙ булып, туған халкының күңел түрендә йәшәй.

**Әҙәбиәт**


(1) Атанова Л.П. Жизнь как песня: Творческий портрет ГазизаАльмухаметова. Уфа, 1973. 4-се бит.
(2) Атанова Л.П. Күрһәтелгәнхеҙмәт. 7-се бит.
(3)Э.Талипова. Ер биҙәге. 38-се бит.
(4) Нурия Амангильдина, Йәшлек,25 октябрь 1995 йыл.
(5) Миләүшә Иҙрисова, Йәшлек, №121 1 ноябрь,2005 йыл
(6) Миләүшә Иҙрисова Газиз Альмухаметов . Уфа, Китап, 2008, 13 стр.,14 стр.
(7)ЮлдашТелямишев Сайт
(8) Азат Юлан. Йәшлек ,№126, 29 октябрь, 2005 йыл
(9) Эльфрида Талипова Юшатыр , 7 февраль, 2006 йыл

Ҡушымта


Ғәзиз Әлмөхәмәтов
3


Әлмөхәмәтовтар шәжәрәһе
4


Ғәзиз туғандары
Фәтих һәм Ғәли менән
5


Амангилде Байморатов 1775-1844
Әлмөхәмәт 1803
Баймөхәмәт 1807
Хәмит 1811
Дәүләтбирҙе 1815
Яхия 1820
Яҡуп 1824
Дауыт 1830
Әхмәтйән 1831
Әхмәтдин 1832
Мөхәмәтдин 1838
Әбделғариф 1846
Абдрахман 1857
Лотфулла 1855
Мөхәмәтйософ 1853
Ниғмәтулла 1858
Миңнеғужа1857
Мөхәмәтсалих 1867
Абдрахман 1887
Ғәзиз 1895
Фатих 1900
Хәйбрахман 1905
Ғәлирахман 1912

## Роза Әлмөхәмәтова –Латипова балалары араһында. Һулда: Рөстәм, Ләйлә, уңда: Фәрит, килене Любовь



6

Баҫып торалар: Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Ғәлирахман Әлмөхәмәтов уның ҡатыны Бәҙриә. Ултыралар: Мәстүрә Фәйзуллина, , Ғәлирахман һәм Бәҙриәнең улы Дмитрий, Ғәлимә Әлмөхәмәтова.



7

## 1914 йылдан Үзбәкстан ҡалалары буйлап гастролдәрҙә йөрөй




8

## Яңы Морапталдағы Ғ.Әлмөхәмәтов музейендә һаҡланған афишалар.




9

## Ғ.Әлмөхәмәтов

«Мин үҙ тыуған халҡымдан
йырларға өйрәндем...»

11

## 1925 йыл Ҡаҙан
## «Сания» операһын башҡарыусылар



13

## Ғәзиз Әлмөхәмәтов ҡатыны Мәстүрә һәм ҡыҙы Роза менән



14

## Өфөләге эшмәкәрлеген сағылдырған документтар









15

## Әлмөхәмәтов етәкселегендә концерт ансамле. Өфө ҡалаһы.



16

## Ғ.Әлмөхәмәтовты Башҡорт студияһы етәксеһе итеп тәғәйенләү тураһында теркәү ҡағыҙы



17




18

## Үлгәндән һуң аҡлау тураһында справка




19